Төҙөүсеһе :Фаршатова Әлфиә Әнүәр ҡыҙы
Янауыл ҡалаһы лицейы




# ЙӘШӘҮ ХАҠЫНА

Төҙөүсеһе :Фаршатова Әлфиә Әнүәр ҡыҙы
Яңауыл ҡалаһы лицейы

**Кинйәкәев Сабир Мөьмин улы (1919-1945)**

Шағир,1942 йылдан КПСС ағзаһы.

Әҫәрҙәре 1936 йылдан баҫыла башлай. Бөйөк Ватан һуғышында Украинаны азат итеүҙә ҡатнаша. 1945 йылдың апрель айында Балҡанда фашистарҙың ҡорал ташламаған төркөмдәрен тар-мар иткән саҡта һәләк була.

Әҫәрҙәре:

“Йыр сафта ҡала”.Өфө,1960 йыл

“Окопта яҙылған шиғырҙар”.Өфө,1975 йыл

“Утлы йылдар ауазы”. Өфө,1985 йыл

Беҙҙең данлы,
ауыр фронт юлы
Балҡан түбәләрен ауыша...
Һинең хатың,
йә ял,
йә походта,
Йә һуғышта килеп ҡауыша.
Хаттарында
Ҡараштарыңды ла,
Йылмайыуыңды ла һалаһың...
Ә үҙең унда,
бик,бик алыҫта,
Күңелем күген бтиләп ҡалаһың.

**Мансуров Зөфәр Хәйретдин улы (1909-1941)**

Шағир,прозаик,тәржемәсе.

Әҫәрҙәре 1934 йылда баҫыла башлай.

1941 йылда ҡыҙыл Армия Сафына алынып,Бөйөк Ватан һуғышында ил азатлығы өсөн ҡорбан була.

Әҫәрҙәре:

Салют.Шиғырҙар һәм тәржемәләр.Өфө,1941 йыл
“Сүлдәр эсендә”исемле поэмаһы һәм шиғырҙары- “Йыр сафта ҡала” тигән йыйынтыҡта.Өфө,1960 йыл.

Ҡара йөҙҙәр бөтмәҫ һәм төкәнмәҫ
Асыу ҡаҡлай икән илемә;
Сәғәт ,минут һайын ынтыла икән
Тап һалырға Совет еремә.
Ҡояш яҡтыһылай илебеҙҙе
Ҡанлы куҙҙәр көн дә кұрәләр,
Тик ҡорос стенаны үтәлмайҙар,
Юлдар ҡыҙы сиккә терәлә!

Төҙөүсеһе :Фаршатова Әлфиә Әнүәр ҡыҙы

Яңауыл ҡалаһы лицейы

**Ханов Сыңғыҙ Һаҙый улы (1915-1941)**

Прозаик.

Әҫәрҙәре 1936 йылда баҫыла башлай. Бөйөк Ватан һуғышында рядовой.

Ленинградты обороналауҙа

ҡатнаша.1941 йылда һәләк була.

Китаптары:
Фатима.Хикәйәләр.Өфө,1942 йыл

Ҡаратау партизандары.Хикәйәләр.Өфө,1958 йыл.

Дошман алдында түбәнһенмәйенсә,

Революция эше өсөн батырҙарса үлергә...

**Ҡунаҡбаев Хөсәйен Әхмәтйән улы (1912-1943)**

Шағир.1941 йылдан КПСС ағзаһы.

Әҫәрҙәре 1931 йылдан баҫыла башлай. Бөйөк Ватан һуғышында-рота политругы,батальон комиссары. 1943 йылдың 13 февралендә Белгород

өлкәһе Новый Оскол ҡалаһы эргәһендәге Ольховатка ауылы өсөн

ҡаты бәрелештәрҙә һәләк була

Китаптары:

Дуҫлыҡ тураһында йырҙар.Өфө,1935 йыл

Хәтимә.Поэма һәм

шиғырҙар.Өфө,1936 йыл.

Минең антым.Шиғырҙар. Өфө,1940 й ыл.

Шиғырҙар.Өфө.1957 йыл.

Сәскәләргә күмелеп,
күкрәп килгән
Тыуған илем минең,

Төҫләләктә һәм бай булыуҙа

Тиңдәшең юҡ һинең!

Ант итәм мин,уны йөрәгемдең
Хистәренә төрөп:

-Республикам,һиңә берҙән-бер һәм

Ҡабатланмаҫ ғүмерем!

Был минең- һис керһеҙ күкрәгемдән

Ҡайнап сыҡҡан антым.

Йәшәһен бөйөк партия

Һәм дә совет халҡы.

**Шакиров Әхмәт Мирғасим улы (1920-1941)**

Шанир.Әҫәрәҙәре 1935 йылдан баҫыла

башлай.1935 йылда Ҡыҙыл Армия сафына алынып,1941 йылда Бөйөк Ватан һуғышындаһәләк була.

Әҫәрҙәре:

Бәхетле тормош(авторҙашы- Ғәли Ибраһимов).Өфө,1940 йыл.

Йыр сафта ҡала (Өфө,1960 йыл) тигән

йыйынтыҡтарҙа.

Кеше!Һинән дә көслөрәк

Һис нәмә юҡ юыл ерҙә,

Ер үҙе лә һиндәге аҡыл

Һәм аң менән төҙөлә.

Океан киң,ләкин мең ҡат

Киңерәк һинең уйҙар:

Океан тәрән,уйҙарың

Мең тапҡыр тәрән унан.

Төҙөүсеһе :Фаршатова Әлфиә Әнүәр ҡыҙы

Яңауыл ҡалаһы лицейы

**Мөхәмәтйәнов Бәҙретдин Мөхәмәтйән улы(1909-1944)**

Шағир һәм прозаик.1939 йылдан КПСС ағзаһы.

Әҫәрҙәре 1931 йылда баҫыла башлай.Бөйөк Ватан һуғышында – тәүҙә радист,унан сапер взводы командиры.1944 йылдың 20 сентябрендә Литваны азат итеү бәрелештәрендә һәләк була.

Киаптары:

Шиғырҙар.Өфө,1939 йыл.

Урал егете.Шиғырҙар һәм поэма.Өфө,1943 йыл.

Ленарияға хаттар.Хикәйәләр,шиғырҙар,иҫтәлектәр һәм фронт хаттары.Өфө,1984 йыл.

Өҫтөбөҙгә уттар яуғанда ла,

Алған ерҙе ташлап китмәҫкә,
Ун мәртәбә тәнгә яра алып,

Ҡандар аҡҡанда ла сикмәҫкә!

Һәр беребеҙҙең күңеле шулай уйлай,

Шул хис менән ҡайнай ҡаныбыҙ.

Беҙ беләбеҙ:

Үҙебеҙ үлгәндә лә,

Мәңгелеккә ҡалыр даныбыҙ.

**Йосопов Ғайса Ғәлиәкбәр улы (1905-1941)**

Шағир.932 йылдан КПСС ағзаһы.

Әҫәрҙәре 1929 йылда баҫыла башлай.

1934 йылдан-Ҡыҙыл Армияла хәрби врач.Аҡ финдарға ҡаршы һуғышта ҡатнаша.Бөйөк Ватан һуғышында-ялан госпиталендә хәрби врач. 1941 йылдың 19 авгусында фашист самолеттары госпиталде бомбаға тотҡанда һәләк була. Ленинград өлкәһе Мельниково поселогында туғандар ҡәберлегендә ерләнгән.

Китаптары:

Төҙөгәндә.Шиғырҙар.Өфө,1933 йыл.

Пәрүәз һәм өй ҡуяндары.Балалар өсөн шиғырҙар.Өфө,1934 йыл.

Һайланма шиғырҙары “Йыр сафта ҡала” йыйынтығында.Өфө,1960 йыл.

Мә,дуҫ кеше,һиңә микроскоп,

Әгәр теләһәң ҡаным ҡарарға.

Коммунаға ҡаршы кер табалһаң,

Минән рөхсәт йөрәгемде утҡа яғырға.
Ошо йөрәк инде ярһып тибә,

Эштә яна-илде төҙөргә,

Машиналы колхоз ҡырҙарында
Бергә эшләп,бергә көлөргә.

**Мөхәмәтйәров Хәй Ғәбдрәфиҡ улы (1911-1941)**

Шағир,1931 йылдан КПСС ағзаһы.

Әҫәрҙәре 1926 йылдан баҫыла башлай.

1940 йылдың февралендә Ҡыҙыл Армияға алына.Бөйөк Ватан һуғышының беренсе көндәренән –алғы ут һыҙығында.1941 йылдың декабрендә Смоленск йүнәлешендәге барған ҡаты бәрелештәрҙә һәләк була.

Китаптары:

Һайланма әҫәрҙәр.Шиғырҙар һәм поэмалар.Өфө,1954 йыл.

Төҙөүсеһе :Фаршатова Әлфиә Әнүәр ҡыҙы
Яңауыл ҡалаһы лицейы

Шиғырҙар,поэмалар,хаттар,көндәлектәр,иҫтәлектәр.Өфө,1982 йыл.

Керпек ҡаҡмай поста тора
Илдең ҙур өмөттәре-
Типкән саҡта тимер өҙгән
Ҡеүәтле егеттәре.
Тыуып-үҫкән илебеҙгә
Дошмандар килһә әгәр,
Күтәрелер ил Балтиктан
Тымыҡ океанға ҡәҙәр.

**Мифтахов С!ғит Мифтах улы (1907-1942)**

Драматург.1925 йылдан КПСС ағзаһы.Әҫәрҙәре 1939 йылдан баҫыла башлай.Бөйөк Ватан һуғышында-батальон комиссары.1942 йылдың февралендә һәләк була.

Киаптары:
Пандар илендә.Драма.Өфө,1932 йыл.
Һаҡмар.Драма.Өфө,1934 йыл.
Дуҫлыҡ һәм мөхәббәт.Пьеса. Өфө,1940.
Ялан ҡыҙы.Драма.Өфө,1940 йыл.
Пьесалар.Өфө,1976 йыл.

...Мин тылда ятып ҡалырға теләмәйем һәм һуғышҡа бармайынса ҡаласаҡ түгелмен.Шундай иҫ китмәле алыш барғанда,оялмайынса нисек өйҙә ултырып ҡалырға мөмкин?..Минең теләгем күптән билдәләнгән,һәм мин ул теләгемә ирешәсәкмен.Ватаным өсөн барған бөйөк һуғышта ҡатнашмайынса ҡаласаҡ түгелмен.

**Абдуллин Мазһар Ғиләжетдин улы(1912-1942)**

Шағир,тәржемәсе.Әҫәрҙәре 1920 йылдан баҫыла башлай.Бөйөк Ватан һуғышында-танкист.1942 йылдың 25 августа Калинин өлкәһе Воригино аыуы өсөн барған ҡаты бәрелештәрҙә һәләк була.
Китаптары:
Тормош.шиғырҙар.Өфө,1933 йыл.
Кимәл.Шиғырҙар.Өфө.1935 йыл.
Башҡортса тәржемәләре:
Дж.Лондон.Бүре.Өфө,1939 йыл.
В.Г.Короленко. Һуҡыр музыкант.Повесть.Өфө,1941 йыл.

Ватан!
Һәр бер кеше һине яҡлау өсөн
Күтәрелде изге көрәшкә,
Миллион күңелдәргә яҡын исем-
Ватан исеме беҙҙең йөрәктә.
Тыуған илдең намыҫын һаҡлауҙан да
Артыҡ бәхет бармы донъяла?
Ватан- әсә.Уның йәшәүе өсөн
Ҡыҙғанмайбыҙ ҡайнар ҡанды ла.

**Моратов Төхфәт  Тәттәхетдин улы(1906-1944)**

Шағир,прозаик.1944 йылдан КПСС ағзаһы.

Әҫәрҙәре 1925 йылда баҫыла башлай. Бөйөк Ватан һуғышында-телефонист,элемтә отделениеһы командиры,орудие командиры.1944 йылдың 27 декабрендә Латвияны азат итеү бәрелештәрендә һәләк була.Латвияның Приекуль районы Будэниеке ауылында туғандар

Төҙөүсеһе :Фаршатова Әлфиә Әнүәр ҡыҙы

Яңауыл ҡалаһы лицейы

ҡәберендә ерләнгән. Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән наградланған.

Әҫәрҙәре:

“Йыр сафта ҡала”.Өфө,1960 йыл.

“Окопта яҙылған шиғырҙар!.Өфө.1975 йыл.“Утлы  йылдар

ауазы”(Өфө,1985)тигән

йыйынтыҡтарҙа.

Их,йәшәргә ине,йәшәргә,
Дошмандарға тағы үс итеп.

Булһа ине,дуҫтар,был ғүмерҙе,

Был ғүмерҙе ике йәшәтеп!

Һуңғыһын да унын һис бер һүҙһеҙ
Бирерн инем Ватан иркенә.
Тик бурысым бар:

үҙ аяғым менән
Берлин урамына инергә!

## Ҡотипов Зиннәт Ҡотип улы
## (1918-1944)

Шағир. Әҫәрҙәре 1936 йылда баҫыла башлай. Бөйөк Ватан һуғышы

башланыу менән- Ҡыҙыл Армия сафында. 1944 йылда Белоруссияны азат итеү һуғыштарында һәләк була.

Китаптары:

Шиғырҙар.Өфө.1939 йыл.

Һайланма шиғырҙары.- “Йыр сафта

ҡала “йыйынтығында. Өфө,1960 йыл.

Ишетһен,улар
Минең антымды,
Ил өсөн бирәм

Барлыҡ ҡанымды.

Беҙ һаман алға
Һәм юғарыға

Батыр атлайбыҙ,
Алға һәм алға!

## Баянов Баязит Фәтхелислам улы (1909-1945)

Прозаик.1931 йылдан КПСС

ағзаһы.Әҫәрҙәре 1928 йылда баҫыла башлай. Бөйөк Ватан һуғышында-полк комиссары.
Ауыр яралана һәм 1945 йылда Өфөлә вафат була.
Китаптары:
Хәрби хикәйәләр.Өфө,1938 йыл.
Фронт хикәйәләре.Өфө,1942 йыл.
Хикәйәләр.Өфө,1948 йыл.

Халыҡ нәфрәте,рәнйетелгән ер

ҡайғыһы ҙур янғынға әйләнә.Был

янғын көн һайын ҙурая,

көслөләнә,осҡондарын алыҫҡа

сәсә.Килер бер көн,беҙ дошманды

яндырырбыҙ...
Әйтерһең,бәхетле,иркен тормошто

татыған халыҡ яңынан иҙеүле

тормошҡа ,ҡолдар тормошонда

йәшәргә риза буласаҡ? Юҡ!

## Хәйретдинов Мөжәһит Хәйретдин улы
## (1901-1944)

Шағир,1924 йылдан КПСС ағзаһы.

Әҫәрҙәре 1930 йылда баҫыла

башлай.1919 йылдан-Ҡыҙыл Армия сафында. 1938 йылда Хасан ауле

Төҙөүсеһе :Фаршатова Әлфиә Әнүәр ҡыҙы

Яңауыл ҡалаһы лицейы

районында япон самурайҙарына

ҡаршы һуғышта ҡатнаша.Бөйөк Ватан һуғышында-полк командиры. 1942

йылдың йәйендә полкы менән ҡамауҙа

ҡалып,ҡаты яраланған хәлдә фашистар

ҡулына эләгә һәм 4 сентябрҙә  Дахау концлагерында язалап үлтерелә.

Китаптары:

Мылтыҡлылар.Шиғырҙар.Ҡазан,1932 йыл.

Гүзәл йәшлек.Шиғырҙар.Ҡазан,1938 йыл.

Иң яҡшы шиғырҙары-Самат

Шакирҙың Хәйретдин Мөжәйгә

бағышланған “Үлемһеҙлек”тигән документаль повесында(Өфө,1981)

Эй,шағир,бел:
Һин һөйгән ил-изге ер ул,

Ҡара тап

Төшмәҫ уға,ул ҡараймаҫ,

Ул азат,фәҡәт азат!
Тамды йәшем тупрағыңа,

Һинең өҫкә,Тыуған ил!
Антым ул һинең исемеңә,
Бөтөнләй һинеке мин!

**Карнай Али Мөхәммәтдин улы**
**(1904-1943)**

Прозаик.1940 йылдан КПСС ағзаһы.

Әҫәрҙәре 1924 йылда баҫылып сыға башлай.

Бөйөк Ватан һуғышында –Башҡорт кавлерия газетаһының редакторы. 1943 йылдың июнендә Чернигов тирәһендә үлә.

Китаптары:
Далалағы уттар.Повесть.Өфө,1932 йыл.
Ишембай.Очерк.Өфө,1935 йыл.

Беҙ ҡайтырбыҙ.Өфө,1940 йыл.

Һайланма әҫәрҙәр.Өфө,1956 йыл.




Ҡулланылған әҙәбиәт
1.Башкирские писатели-фронтовики.

Ради жизни.Йәшәү хаҡына. Издательство башкирского обкома КПСС.1985 г.